РЕСПУБЛИКАНСКАЯ ОЛИМПИАДА ШКОЛЬНИКОВ НА КУБОК имени Ю.А. ГАГАРИНА

2020-2021 учебный год

КУБОК ГАГАРИНА олимпиада школьников

# БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК

ШКОЛЬНЫЙ ЭТАП

8 класс

***Максимальное количество баллов за задания:***

| Задания | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 | Сумма |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Количество баллов | 2 | 3 | 5 | 5 | 8 | 5 | 6 | 4 | 5 | 5 | 6 | 8 | 62 |

***Все оценки должны быть целыми числами, дробные оценки не допускаются!***

## ОТВЕТЫ И РЕКОМЕНДАЦИИ ДЛЯ ПРОВЕРКИ

| *Һораузың тәртибе* | *Аңлатма* | *Иң юғары иҫәп (бал)* |
|---|---|---|
| **1-се һорау** | һәр дөрөҫ яуапҡа берәр балл:<br>**Ъ, ь** | **2 бал** |
| **2-се һорау** | Дөрөҫ һәм тулы яуапҡа 3 балл, әгәр бер хата китһә, 2 балл, 2-3 хатаға – 1 балл:<br>**6. Теркәүес, киҫәксә, бәйләүес, ымлыҡ, мөнәсәбәт (модаль) һүҙ, оҡшатыу һүҙе** | **3 бал** |
| **3-сө һорау** | Һөйләмдәр дөрөҫ төҙөлһә, 5 балл ҡуйыла, 1-2 хатаға – 3 балл, 3-4 хатаға – 2 балл, унан күп хатаға балл ҡуйылмай<br>**Борон-борон заманда ете ҡыҙ йәшәгән. Бер ваҡыт улар тауға еләк йыйырға  киткәндәр. Урмандан аждаһа килеп сыҡҡан. Аждаһа ҡыҙҙарҙы баҫтыра башлаған. Ҡыҙҙар йүгереп тау башына менгән. Аждаһа ҡыуып еттем тигәндә генә, улар тауҙан күккә һикергән. Был йондоҙҙарҙы Етегән йондоҙ тиҙәр** | **5 бал** |
| **4-се һорау** | Дөрөҫ төҙәтелһә, 5 балл ҡуйыла, 1-2 хата ҡалһа – 3 балл, 3 хата – 1 балл:<br>**Шуға ла мин беләм тел ҡәҙерен:**<br>**Бер телдән дә телем кәм түгел –**<br>**Көслө лә ул, бай ҙа, яғымлы ла,**<br>**Кәм күрер уны тик кәм күңел!**<br>**Халкым теле миңә – хаҡлыҡ теле, -**<br>**Унан башка минең илем юк;**<br>**Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,**<br>**Иле юҡтың ғына теле юк!** | **5 бал** |
| **5-се һорау** | Һәр дөрөҫ яуапҡа берәр балл ҡуйыла:<br>**Етегән йондоҙ – Большая Медведица**<br>**Ете – семь**<br>**Ҡыҙ – девушка**<br>**Тауға – на гору**<br>**Аждаһа – дракон**<br>**Йүгерәләр – бегут**<br>**Күк – небо**<br>**Улар – они** | **8 бал** |

| *Һорауҙың тәртибе* | *Аңлатма* | *Иң юғары иҫәп (бал)* |
|---|---|---|
| **6-сы һорау** | Дөрөҫ яуапҡа берәр балл:<br>**Аҡсаң күп булғансы, дуҫың күп булһын.**<br>**Аҡылһыҙ дуҫтан аҡыллы дошман артыҡ.**<br>**Дошмандан илең һаҡла, дуҫыңдан сереҥ һаҡла.**<br>**Дуҫ илатып өйрәтер, дошман көлдөрөп өйрәтер.**<br>**Ил өҫтөндә илле дуҫың булһын.** | **5 бал** |
| **7-се һорау** | Дөрөҫ яуапҡа берәр балл:<br>**Дуҫым** **Дуҫымды**<br>**Дуҫымдың** **Дуҫымда**<br>**Дуҫыма** **Дуҫымдан** | **6 бал** |
| **8-се һорау** | Дөрөҫ яуапҡа берәр балл:<br>**Тырышып, килгәнсе, ҡайтҡас, йүгерә-йүгерә** | **4 бал** |
| **9-сы һорау** | Дөрөҫ яуапҡа 5 балл, 1-2 хата – 4 балл, 3 хата – 3 балл, 4 һәм артыҡ хатаға балл ҡуйылмай:<br>**Атай, әсәй, икмәк, ҡояш... Ниндәй матур һүҙҙәр! Әйтеү менән үк күңелде шатлыҡ солғай. Башҡортостан, Салауат батыр, Урал, Ағиҙел... Нисек ҡәҙерле улар!**<br>**“Ҙур үҫ, кеше бул!” – ти атаң-әсәң. Изге теләкте улар туған телдә әйтә. Һин – атаң-әсәң балаһы. Атайың менән әсәйең – үҙ халҡының балалары.** | **5 бал** |
| **10-сы һорау** | Дөрөҫ яуапҡа берәр балл:<br>**“Генерал Кусимов” – Р. Өмөтбаев**<br>**“Үлмәҫбай” – М. Кәрим**<br>**“Әсә һәм бала” – Т. Ғиниәтуллин**<br>**“Тол ҡатындар һәм аяҡһыҙҙар бейеүе” – Р. Сафин**<br>**“Ер” – Б. Бикбай** | **5 бал** |
| **11-се һорау** | Миңлеғәле Минһажетдин (Минһаж) улы Шайморатов, тип яҙһалар 3 балл, уның батырлығы тураһында тулы мәғлүмәт бирһәләр, өҫтәп 3 балл ҡуйыла, тулы булмаған мәғлүмәткә – 1 йәки 2 балл<br>**Миңлеғәле Минһажетдин (Минһаж) улы Шайморатов 1899 йылдың 15 авгусында хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районы Биштәкә ауылында тыуа. 112-се Башҡорт атлы кавалерия дивизияһы командиры. 1943 йылдың 23 февралендә, дошман тылындағы оҙайлы рейдтан һуң фронт һыҙығы аша сыҡҡан ваҡыттағы тиңһеҙ һуғыштарҙа Башҡортостандың баһадир улы гвардия генерал-майоры М. М. Шайморатов Ворошиловград өлкәһе Ивановка районының Штеревка утары янында батырҙарса һәләк була. 2020 йылда уға Рәсәй Федерацияһы Геройы исеме бирелде. Совет майҙанында М. Шайморатовҡа һәйкәл ҡуйыласаҡ.** | **6 бал** |
| **12-се һорау** | Йөкмәткеһе өсөн – 2 бал,<br>уҡыусының телмәре өсөн – 3 бал,<br>грамоталылығы өсөн – 3 бал ҡуйыла | **8 бал** |